*Гәйникамал МИРХӘЙЕВА*

# Әйле башҡорттары

Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш төбәгендә төп халыҡ булып әйлеләр һанала. Был ҡәбилә күп быуаттар һуҙымында Әйле, Дыуан, Ҡошсо, Күҙәй, Тырнаҡлы, Мырҙалар, Ҡаратаулы, Түбәләс, Өпәй, Һарт, Ҡатай ырыу-аймаҡтарының берләшеүенән барлыҡҡа килгән һәм улар талашыҙғыш тыуҙырмайынса, үҙ-ара һөйләшеп, ярҙамлашып, туғанлашып йәшәгән.

Ырыу аҡһаҡалдары йыйылышында ер бүлгәндәр. Ырыу, аймаҡ, нәҫелдәр ерҙәре сиктәрен билдәләгәндәр. Ҡайһы саҡта ошо биләмәләге кешеләргә яза биреү тураһында ҡарарҙар ҙа сығарғандар. Мәҫәлән, 1958 йылда Салауат районы Ахун ауылында йәшәүсе 83 йәшлек Сәләхетдин бабайҙың һөйләүенсә, тырнаҡлыларҙың кемелер үҙ белдеге менән бер нисә ауылдашының ерен Һикеяҙ ауылы урыҫына һатып ебәрә. Бының өсөн уны, йыйын ҡарары менән, скрипкаһын ҡулына тоттороп, ауылдан ҡыуып ебәрәләр. Ошо хаҡта ауыл кешеләре:

Тырнаҡлылар ит тоҙлайҙар
ҡарағай күнәк, силәккә,
Тырнаҡлылар ер биргәндәр
Егор байға бүләккә, –

тип йырлай торған булған.

Башҡорттар араһында һан яғынан һәм нәҫел-ырыу составы буйынса иң ҙур берләшмә булып Табын һанала. Уға алты ҡәбилә инә: табындар, мырҙалар, ҡыуаҡандар, бишулдар, бәҙрәктәр һәм ҡумырыҡтар.

Табын ҡәбиләһе, үҙ сиратында, көнбайыш һәм көнсығыш табындарға бүленеп, Башҡортостандың үҙәк һәм төньяҡ өлөшөндә ҡатай, кәлсер, йомран, ҡошсо, дыуан һәм һарт ырыуҙары; Уй, Йайыҡ буйында ҡара-табын, барын, тиләү, күбәләктәр көн күргән.

Ошо ырыуҙарҙың ҡайһы берeһенә туҡталып үтәйек.

Ҡатай ырыуы. VII-VIII быуаттарҙа төркиҙәрҙең мәҙәниәте, яҙмаһы сәскә атҡан ваҡытта, оло ҡағандарҙы ерләгәндә 3 метр бейеклегендәге таш бағананың бер яғына – төрки, икенсе яғына ҡытай телендә улар ҡасан, ҡайҙан килгән, яңы ҡағанды кейеҙгә баҫтырыуға кемдәр шаһит – бөтәһен дә яҙып барғандар. Шулай уҡ ташта туғыҙ төрки ҡәүеме – табындар, кидандар (ҡатайҙар), түңгәүер, ҡыпсаҡ, үҫәргәндәр исеме ташта яҙып ҡалдырылған.

Яңы эраның баштарында Төньяҡ Монголияла, шулай уҡ бөгөнгө Ҡытай биләмәләрендә кидандар-катайҙар тигән көслө ҡәүем йәшәгән. Ғәскәре булған был халыҡ, ваҡыты менән көсәйеп китеп, бер нисә быуат буйына ҡытайҙарҙы үҙҙәренә буйһондороп торған. Ҡатайҙар көнбайышҡа табан күсенгәндә үҙ исемдәрен чина иленә ҡалдырған.

Заманында боронғо Ҡытайҙы, Урал тауҙары итәгенең Европа өлөшөн генә түгел, Азияны ла дер һелкетеп тотҡан ҡатайҙар күп төрлө өлөштәргә бүлгеләнеп, күсһөҙләнеп, төрлө административ биләмәләргә һибелгән.

Ҡатайҙарҙың ҡара-ҡатайҙарҙан, йәки кидандарҙан сығыуын раҫлаған фекерҙәр бынан бер мең йыл самаһы элекке тарихи-этнографик мәғлүмәттәрҙә теркәлгән.

Ҡатайҙарҙың һөйләштәрендә йылға исемдәре (Ҡатай йылға), ҡәбер таштары буйынса Үҙәк Азия, Алтай менән бәйләнгән һыҙаттар асыҡ күренә.

Ҡатайҙарҙың ата-бабалары XII-XIII быуаттарҙа Дим, Сөн, Ыҡ, Ағиҙел йылғалары, XIV быуаттарҙа Чусовая, Инйәр йылғалары буйҙарына ултырған һәм ундағы тамъяндар, табындар менән аралашҡан. XVI быуаттарҙа инде ҡайһы берҙәре кире көнсығышҡа – Урал арьяғы далаларына күсенгән һәм уларҙы әле ялан-ҡатайҙар тип йөрөтәләр.

XVI-XVII быуаттарҙа бала һәм оло ҡатайҙар Өпәй (Уфалей) һыртының көнсығышына – Тинес, Ҡараболаҡ, Һәнәр (Арғаяш, Ҡоншаҡ райондары) һәм Әй йылғаһына ҡушылған Оло һәм Кесе Ыҡ (Ыйыҡ)

йылғалары буйына (Балаҡатай районында) урынлаша.XVII быуаттағы мәғлүмәттәр буйынса, бындағы ҡатайҙарҙы Билән ҡатайҙар тип атағандар. (Билән ауылы ла бар.) Бала һәм оло ҡатайҙарҙың бер туғандан таралыуын, тамғаларының бер-береһененә оҡшаш булыуы һәм ике ҡатай араһында никахлашыуҙың рөхсәт ителмәүе лә раҫлай быны.

Балаҡатай ырыуы халҡы Үтәш, Билән, Апут, Кәрекәй, Масҡара, Ҡәйүм ауылдарында йәшәй.

Ҡатай ҡәбиләһе алты ырыуҙан тора. Уралдың көнсығышында – Оло Ҡатай, Ҡоҙғон-Ҡатай, Ялан-Ҡатай, Инйәр-Ҡатай, ә Уралдың көнбайышында Иҙел-Ҡатай, Бала-Ҡатай төбәкләнгән.

Ҡытай, Ҡтай, хтай, хитай варианттары ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк, нуғай, гагауздарҙа ла осрай. Ә ҡара-ҡатай исеме ҡиҙандарҙа һәм Башҡортостандан башҡа ҡырғыҙҙарҙа ғына осрай. Ҡара-ҡатайҙар заманында Төркөстанда үҙ дәүләттәрен ойошторған булған. Ә һөйләш телдәренә (анта, бынта, йомто) ҡарап, тел ғалимы Жәлил Кейекбаев уларҙы «Орхон яр буйҙарынан сығыусылар» – тип атаған. Ысынлап та, Үтәш ауылынан Ҡабил ауылына килен булып төшкән Һандуғас, Мәүсуфа әбейҙәр анта, бынта тип, йәки «да-дә» урынан «та-тә» ҡулланып һөйләшә торғайны.

XI-XII быуаттарҙа ҡатайҙарҙың тамғалары балға (солоҡ соҡоу өсөн ҡулайлаштырылған кәкре балтаға оҡшаған) – балыҡсылар ырыуы тамғаһына бик ныҡ оҡшаған була.

Урал аръяғында бер-береһе менән йәнәшә туғанлашып йәшәгән бәкәтин, мәкәтин, терһәк, һеңрәндәрҙе бындағы күп ерле һалйоттар үҙҙәренә һыйындырған. Тубылдан көнбайыштағы далаларҙа ла һеңрәндәр байтаҡ. (Был Күсем хандың вариҫтары булған һеңрәндәргә Күсем хан ныҡ таянып эш иткән).

Бәкәтин, мәкәтин ырыуҙары, XVIII быуаттағы мәғлүмәттәр буйынса, ерҙәре артыҡ ҙур булмаһа ла, Уралда Иртәш һәм башҡа 49-лап күл тотҡан. Тик һуңынан урыҫ һәм татар сауҙагәрҙәренә арендаға бирәбеҙ тип, был күлдәрҙән үҙҙәре файҙалана алмаған, юғалтып бөткәндәр.

Әйлеләр ҡәбиләһе. Әйлеләр тарихы б.э.т. VII-I быуаттарға барып тоташа. Был мәлдә Әй буйында йәшәгән ырыуҙар һәм нәҫелдәр төрлө ырыу ҡатламдарынан торған, һуңыраҡ ҡына бергә берләшкән.

VI-VII быуаттарҙа әйлеләр көнбайышта Дим буйынан алып көнсығышта Тубыл йылғаһына тиклем бик ҙур майҙанда йәйелеп ултырған. Хәҙер уларҙың төп ултырған урыны булып Ҡариҙел, Әй, Йүрүҙән, Эҫем, Ләмәҙ буйҙары иҫәпләнә.

Әйлеләрҙең сығышы уғыҙҙарға бәйле булһа ла, беҙҙең эраның тәүге бер мең йыллығы осоронда көнсығыштан килгән бик күп күсмә халыҡтарҙың әйлеләр берекмәһенә ҡушылыуы ихтимал. Мәҫәлән, ҡыпсаҡтар, төркиләшкән монголдар. Мырҙаларҙың легендалары Монголияны тыуған ил тип, ҡаратаулылар, тырнаҡлылар үҙҙәрен Алтайҙан сыҡҡан, тип иҫәпләй. Шайтан-көҙәйҙәрҙең ата-бабалары, йәнәһе, Кавказдан, төрөкмән-күҙәйҙәрҙең – Урта Азиянан килгән, тиҙәр. Ғалимдарҙың фекеренсә, меңенсе йыл урталарында Саян-Алтай ҡалҡыулығында боронғо күҙәй берләшмәһе булыуы ихтимал. Күрәһең, уларҙың бер өлөшө һуңынан Төньяҡ Кавказға, бер өлөшө бөрйәндәр һәм башҡа ырыуҙар менән бергә Ағиҙел буйҙарына килеп ултырған.

VII быуатта монголдар менән бергә дүрбандар-дыуандар ҙа көнбайышҡа күсенгән һәм ҡыпсаҡтар менән аралашҡан, тәүҙә Һамар, Ағиҙел буйҙарында, ә һуңынан Әй буйына килеп сыҡҡан.

Әйлеләр ҡәбиләһененең дыуандар, ҡаратаулылар составына, ә көнбайышта таныптарға таҙ ырыуҙары ла ҡушылған. Таҙ ҡәбиләһе бик борондан Саян-Алтай тауҙарында йәшәгән. Хәҙер ҡаҙаҡтарҙа Кесе Йөҙҙә таҙ, үзбәктәрҙә манғыт, ҡырғыҙҙарҙа сарыбағыш, Төркмәндә йомуд ҡәбиләһендә таҙ ырыуҙары булыуы билдәле. Төньяҡ Башҡортостандың Танып таҙҙары менән көнсығыштағы Әйле таҙҙары элек бер-береһенә, туғандарына барып та йөрөгән булған. Таҙҙар көнсығыштан ҙур төркөм булып килмәгәнлектән, төрлө ҡәбиләләр составында осрай, йәки улар бөтә Башҡортостанға таралған.

Табын берләшмәһендәге боронғо монгол ҡәбиләләре вариҫтары булған тамъян ырыуы Алтай-Саян крайының этногенетик донъяһына барып тоташа. Тамъяндарҙа I быуаттарҙа бөрйәндәр һәм түңгәүерҙәр һымаҡ уларҙың байтағы Дим, Нөгөш, Өршәк буйҙарынан Уралдың таулы-урманлы зонаһына һыйынған, ҡайһы берҙәре Нөгөш, Өршәк, Дим буйҙарына кире күсенгән. Ләкин унда аҫаба булып иҫәпләнмәгәндәре Урал аръяғына кире килеп төпләнгән. Тимәк, әйлеләр ҡәбиләһенә тамъяндарҙың да ҡатнашлығы бар.

Шулай итеп, Табын берләшмәһендәге биш ырыуҙың өсөһө – Дыуан, Ҡошсо, Һарт ырыуҙары – Башҡортостандың үҙәк

өлөшөнән төньяҡҡараҡ – Әй йылғаһы үҙәненә килеп урынлашҡан. Унда Әйле, Ҡатай һымаҡ башҡа ырыуҙар менән берләшеп, башҡорттарҙың төньяҡ-көнсығыш төркөмөн, йәки Әйле ҡәбиләһен барлыҡҡа килтергән.

Тик һуңғы 120-150 йыл эсендә генә кешеләрҙең үҙ-ара аралашыуына бер миҫал килтерәйем. Мин Ҡыйғы районының Ҡабыл (Аллагуҙ) ауылында, урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуып үҫкәнмен. Атайым – Әкрәм Мирхәйҙәр улы, ә Мирхәйҙәр – Әбделҡәҙир – Мөхәмәтшәрип – Ирғәле – Мусаҡәлим – Кейексе уландары. Атайымдың әсәһе (инәһе) йәки ҡәртнәйем Хөсниямал Сәйетборхан ҡыҙы Салауат районы Лағыр ауылынан ҡарттайыма йәрәшелеп алынған.

Әсәйем (инәйем) – Мәхмүзә Йосопйән ҡыҙы, Балаҡатай районы Үтәш ауылынан Ҡабыл ауылына атайыма кейәүгә бирелгән. Ҡәртнәйем Ғәйшәбикә Әхмәтйән ҡыҙы, Үтәшкә Мәсетле районы Ясин ауылынан Йосопйән ҡарттайыма, ә оло ҡәртнәйем Гөлйемеш, Борғатья ауылынан Ясинға – Әхмәтйән ҡарттайға йәш кәләш булып күсеп килгән.

Быны менән, миндә дыуан, балаҡатай, ҡошсо, тырнаҡлы ырыуҙары ҡаны берләшмәһе бар (аға, хәрәкәт итә) йәки Әйлеләр ҡәбиләһенә инәм, тип әйтмәксемен.

Әйлеләр ҡәбиләһе ете ырыуҙан тора – Әй, Көҙәй, Мырҙалар, Түбәләҫ, Дыуан һәм Ҡошсо, Өпәй. Әй ырыуы Әйле, Тырнаҡлы, Ҡаратаулы, Төрөкмән һәм Һарт Әйле аймаҡтарына бүленә.

Һыҙғы һәм Өпәй ырыуҙары халҡы Мәсетле районының Теләш, Ишәле, Тәкә ауылдарында ғына ҡалған. 1917 йылғы Октябрь революцияһынан һуң күп Өпәй, Һыҙғы башҡорттарының күп ауылдары административ яҡтан Силәбе, Свердловск өлкәләренә күсерелде. Һыҙғы һәм өпәйҙәр – бик боронғо ырыуҙар, сығышы менән фин-уғырҙарға барып тоташа. Улар башҡорт мөхитендә төркиләшкән һәм татарҙар менән нык аралашҡан. Ә төрки монголдарҙа уларҙың этнонимы осрамай (Янғужин Р.З. Башҡорт ҡәбиләләре тарихынан. Өфө. 1995 йыл, 76-сы бит).

Көҙәй ырыуы кешеләре Әлкә, Иҙрис, Йонос, Ишембай, Яхъя, Малаяҙ, Юлай, Ҡыҙыл Ялан ауылдарында йәшәй. Легендаларға ҡарағанда, Әйлеләр, Тырнаҡлы, Ҡошсолар, Ҡаратаулы, Мырҙалар, Һартәйлеләрҙең ата-олаталары көньяҡ-көнсығыштан – Һырдарья буйҙарынан килгән.

Шәжәрә буйынса, Көҙәй бейҙең тәхете Еҙем йылғаһы тамағында торған. Һуңынан нуғайҙарҙың ҡыҫымы аҫтында Ағиҙел, Ҡариҙел, унан Йүрүҙән, Эҫем, Ләмәҙ йылғалары буйына күсеп ултырғандар.

Мырҙалар ырыуы халҡы Ахун, Мырҙалар Мәсетлеһе, Һарғамыш, Илтәй, Баҙраҡ, Мөсәт, Иҙелбай, Күсәләр, Мәхмүт ауылдарында йәшәй. Ҡаратаулылар аймағы халҡы Салауат районының Йүрүҙән йылғаһы буйындағы Бишәүҙәр, Арҡауыл, Яңы Ҡаратаулыла көн итә.

Түбәләҫ ырыуы халҡы ла Салауат районының Тирмән, Урмансы, Ҡалмаҡкүл, Ҡалмыҡтар, Биш Илсекәй ауылдарында йәшәй.

Һарт ырыуы. Дыуан районы Мәрйәмғол ауылында табылған шәжәрә буйынса, Һарт ырыуы башҡорттары Урал тауҙарындағы Учалы районына, Мейәс йылғаһы үҙәндәренә Урта Азиянан килеп ултырған. Бер аҙ ваҡыт үткәс, алты аймаҡ Әй буйҙарына ла күсеп ултырған, тип күрһәтелә.

Халыҡтар араһында, имеш, һарт-әйлеләрҙең ата-бабалары, Арал күле аръяғында йәшәгән ваҡыттарында юғалтҡан һарыҡтарын эҙләп йөрөгәндә, яҡшы көтөүлектәргә бай булған Уралға килеп сыҡҡан да, шул ерҙә тороп ҡалған. Алты туған Әй, Әнйәк йылғалары буйҙарына килеп ултырған.

Этник туғанлыҡ яғынан табындар Урта Азиялағы боронғо төркиҙәргә барып тоташа. Табындарҙың ата-олатайҙары ҡасандыр Алтайҙа йәшәгән. Ундағы бер бейек тыуҙы монголдар бөгөн дә Табын Богдо-Оло тип йөрөтә. VI быуаттарҙа табындар үҙҙәренең башлығы атаҡлы Ашин Ҡағандың ейәне булған Төмән етәкселегендә боронғо төрки дәүләтен (ҡағанатын) ойоштор ған. Уға Үҙәк Азия, Төньяҡ Ҡытай һәм Урта Азия ере ингән. Төрки ҡағанатының иң юғары күтәрелеш (552-745) мәлендә табындар Етейылғаға табан күсенгән. Яйлап Арал далаларына, Волга буйына һәм Көньяҡ Уралға, Башҡортостанға килеп таралған. Табындарҙың шәжәрәһе буйынса, уларҙың Төмән тоҡомо, Сыңғыҙхандың хәрби етәкселәренең берәһе булған Майҡы бейгә бәйле булыуы тураһында һөйләй.

Риүәйәттәргә ҡарағанда, Лағыр ауылы Әй буйында иң боронғоларҙан һанала. Уны нигеҙләүсе Сысҡандың өс улы булған. Үҙенең булған бар ерҙәрен шул өс улына бүлеп биргән. Иң бәләкәйе — Тырнаҡлыһы, атаһының ауылында ҡалған. Һуңынан уның улдары һәм ейәндәре Йүкәлекүл, Яуын, Ибрай (Соңҡа), Ҡәҙер ауылдарын

ойоштorған һәм Лағыр ауылындағылар менән Тырнаҡлылар ырыуын барлыҡҡа килтергән. Сысҡандың уртансы улы Мырҙа Йүрүҙән йылғаһы буйҙарына барып ултырған һәм Мырҙалар ырыуын нигеҙләгән. Хәҙер Мырҙалар Мәсетлеһе ауылы торған ерҙә мәсет тә һалдырғандан һуң ул ауылды Мырҙалар Мәсетлеһе тип йөрөтә башлағандарҙыр... Бер нисә тиҫтә йылдан һуң йылғаның үрге һәм түбәнге ағымы буйҙарына Мырҙаның уландары-ейәндәре Ахун, Илтәй, Мәхмүт, Арҡауыл, Баҙраҡ ауылдарын барлыҡҡа килтергән...

Сысҡандың оло улы Дыуандың балалары иң күп һанлы булып сыҡҡан. Ул Дыуан-Мәсетле ауылына башланғыс һалған, ә XX быуат башында инде 25 дыуан ауылы иҫәпләнгән. Уларҙың иң боронғолары булып Абзай, Аллағол (Аллагүҙ), Тайыш, Иҫке Яуыш, Аҙанғол, Ҡаранай, Төрөпкилде ауылдары һанала, ә Иҫке Яуыштың Абзайҙан, Абзайҙың Иҫке Йорт ауылынан айырылып сығыуы ла билдәле.

Әй (Әйле) формаһы үзбәк, төрөкмән, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙҙарҙа, хатта әзербайжан, төрөктәрҙә лә осрай. Профессор Р. Кузеевтың фекеренсә, төрки халыҡтарының Әй ырыуы һәм нәҫелдәре көньяҡта йәшәүсе уғыҙҙар менән тығыҙ бәйләнгән. 1247-1318 йылдарҙа йәшәгән Иран ғалимы Рәшид-әд-дин тарафынан төҙөлгән уғыҙҙарҙың боронғо структураһы буйынса, яраҙ, дүкән, дүрге һәм яйырлы нәҫелдәренең берләшеүенән Әй ырыуы барлыҡҡа килгән. Ырыуға Уғыҙҙың икенсе улының исеме (Әй) бирелгән. Әйлеләрҙең ярым ай һүрәтле тамғаһы ла сығышы яғынан боронғо уғыҙҙарҙыҡы. Мәсетле районындағы Мәсетле менән Яуыш ауылдары араһында, Әйҙең бейек яры буйында, Үгеҙҙәр исемле ҙур булмаған ауыл да бар ине, хәҙер ундағы кешеләр Яуыш ауылына күсеп ултырҙы, күптәре ситкә сығып китте. Был Ай тамғалы тоҡомдо Айлы, һуңынан Әйле—Әйлеләр тип, ә улар эскән йылғаны «Ай»-«Әй» тип атауҙары бик мөмкин.

Ҡайһы бер ғалимдар, Әйлеләр башта Көньяҡ Уралға, унан Ағиҙел, Яйыҡ, Мейәс йылғалары буйҙарына ултырған, Әбйәлил районында ла Әйҙегән тигән тау бар, тиҙәр.

Әйлеләр ырыуы кешеләре Ҡыйғы районындағы Иҙрис, Лапаҫ, Ҡолбаҡ, Әбдрәзәк ауылдарында, Салауат районында Лағыр, Торналы, Яҙғы Йорт, Балаҡатай районында – Ургалы, Хәйбәт, Әбсәләм, Ҡаҙыр ауылдарында йәшәй. Башҡортостандың Туймазы районында, Пермь, Екатеринбург, Силәбе, Курган, Омск, Төмән, Кустанай өлкәләрендә йәшәгән аҡ һәм ҡара табындар ырыуынан булған әйләләр тураһында мәғлүмәттәр бар.

1957 йылда Көйөргәҙе районы Яҡшымбәт ауылында Ғәле Бирҙиндән алынған шәжәрәлә 1877 йылда үлгән Тажетдин Ялсығол (1767-1838) тарафынан яҙыла башланып, 1912 йылда Миңлекүл Ғәбделнасир яҙып бөтөргән шәжәрәлә: Әйле башҡорттары – Ҡошсо, Дыуан, Ҡаратаулы, Түбәләҫ, һартлылар Әй, Йүрүҙән буйҙарында IX быуатҡа тиклем үк төпләнгән булған, тип әйтелә. Унда шулай уҡ Субра исемле кешенең Юлбуға тигән улы, Майки тигән ҡыҙы булып, унан Тоҡсаба тигән улы тыуған. Унан Күскәр бей – Шәкүрәли бей, унан Күрбәс бей – Жандыуан, унан Ҡотлоғол – Дыуан тыуған тип күрһәтелә.

1895 йылда Бишҡайын ауылында Ишҡужин Бәҙретдин тарафынан яҙылып, Мәхмүт ауылында табылған шәжәрәлә Юлбуға ауылы Тутса нәҫелдәре Иҫәндәүләт – Туҡбулат – Туҡраҡ – Туҡсура – Ямат – Юлҡотло – Әй йылғаһы буйҙарында, ә Юлбуғаның икенсе улы Имса нәҫелдәре – Юлҡотло – Монай – Ҡолой, Туҡас – Тубыш – Этембай – Кинйә – Кинжәғол – Рәхимғол – Батырша Йүрүҙән йылғаһы буйҙарына урынлашҡан, тип әйтелә. Хәҙерге Дыуан аймағы халҡы башта Ағиҙел ярында, Бөрөнән 25 саҡырым көньяҡтараҡ Дыуанай (Дуванай) ауылында йәшәгән, һуңынан Ҡариҙелдең һул ярына сығып, хәҙерге Дыуан ауылына нигеҙ һалған (был ике ауылда ла хәҙер урыҫтар йәшәй). Һуңынан, билдәле сәбәптәр арҡаһында, тағы ла яңы урынға – Әй ярына күсеп ултырғандар. Ауылдарына мәсет тә һалып ебәргәс, ул Дыуан Мәсетлеһе булып киткән. Тел белгесе Таһир Баишев 1961 йылдың 27 июнендә миңә яҙған бер хатында: «Дыуан – монгол һүҙе, «идара итеү органы булған үҙәк» булып сыҡты (место, где находится управление округом), башҡаса аңлатма таба алманым», – тип яҙҙы.

1920-25 йылдарҙа Дыуан-Мәсетлелә фельдшер, һуңынан уҡытыусы, директор булып эшләгән ваҡытында ҡулдан-ҡулға күсерелеп йөрөтөлгән шәжәрәне табып, Таһир ағай үҙе ғәрәп графикаһынан латин алфавитына күсергән. Ә 1958 йылдарҙа уны ипкә килтереп таныштарына, һәм 1977 йылда Йосопов Фәтҡулла ағай артынан беҙҙең музейға (Мәсетлегә) ебәргән булған...

1954 йылда Мәсетлелә Шәрипов Жәләлетдин бабайҙан ашъяулыҡ ҙурлығындағы һарғылт ҡағыҙға яҙылған Мәсетле халҡының ҡайһы бер нәҫелдәре шәжә-

рәһен алып, ул ваҡыттағы математик Нурыев Ризаның әсәһенән уҡытып, мин дә урыҫ алфавитына – башҡортсаға күсергәйнем. Тик мин бер ниндәй ҙә яңылыҡ асмағанмын, шул уҡ Мәсетле халҡы шәжәрәһе менең дә ҡулға эләккән генә булған.

Был шәжәрәлә бирелгән тоҡомдарҙың төп бабалары итеп ике кеше – Ҡарамыш һәм Батыр күрһәтелгән.

Әйиләр ауылдары. Туҡбай ауылын Кәшкейәк тип йөрөтөүҙәре уның тәбиғи байлығына бәйләнгәндер. Күрәһең, йылға буйы үҙәндәре, тауҙарындағы шыршы, ҡарағай, ҡайын урмандары кешкә, айыу, бүре, төлкө һымаҡ кейектәргә бай булған. Шуға ла башта уның ерҙәрен, йылғаһын, һыуынан ауылын да «Кешкейек» ауылы тип әйткәндәрҙер. Хәҙер беҙ Кәшкейәк тип, ә урыҫтар «Кушкаяк» тип йөрөтә.

Бурансы (Буран-сы) ауылын «һаҡауҙар ауылы» тип йөрөтөүҙәрен 1952 йылдарҙа Бикмөхәмәтов Әлмөхәмәт, Ҡасимйәнов Фазлиәхмәт бабайҙар былай аңлатты: имеш, Бурансы ҡарт һыбай юл буйлап китеп барғанда, өйөр йылҡыһын юғалтҡан сит ауыл кешеһенең: «Минең сығып киткән өйөр малымды осратманығыҙмы?» – тип һорауына, эйәрендәге мендәренән бер генә бөртөк ҡаҙ йөнөн алып, теге кешенең өйөр малы киткән яҡҡа өрөп ебәргән. Шул ваҡыттан башлап теге сит кеше был ҡартты һаҡау тип уйлаған һәм ауылын да һаҡауҙар ауылы тип атағандар.

Ҡаранай ауылын «һәкәттәр» тип йөрөтөүҙәре тураһында йор һүҙле, ваҡытында иле, ауылы өсөн янып-көйөп йөрөгән Хөсәйен Ғайсин, Хәсән Сафин, Хәйерзаман Салауатов, Латип Шафиҡов, Вәлиулла Абдрахманов бабайҙар һөйләүенсә: Ҡаранай ҡарт һунарға сығырға йыйынғанда эйәренә менә алмай торған. Шул саҡ иптәштәре: «Нәкәҫ, тиҙерәк мен атыңа?!» – тигәндәр.

Яуыш ауылын «Күк йүргәк» тип йөрөтөүҙәрен әле 1961 йылда 81 йәшлек Рәхмәтулла бабай: «Был ауылға иң беренсе булып Яуыш исемле кеше ултырған. Ә ул 10-15 көнлөк бала, күк йүргәккә төрөлгән килеш, инәһеҙ-атаһыҙ һуғыш яланында ятып ҡалған бала була. Исмәғил ауылы кешеләре етемде алып үҫтерәләр, исемде лә Яуыш (Яу улы) тип бирәләр. Шул уҡ ваҡытта күк йүргәген дә онотмайынса ҡушаматы итеп алғандар», – тип хәтерләй ине.

Ҡошсолар ырыуы. Әйиләр ҡәбиләһенә ингән ҡошсолар төрки халыҡтарының көнбайыш походтарында ҡатнашҡан. Шуға ла төрки халыҡтары составында киң таралған. Күп ғалимдар ҡошсоларҙы һүндар осоронда Алтайҙан килгән табындарҙан бүленгән, тип билдәләй. Уларҙың төп йорто булып Мәләкәҫ ауылы һанала. Был атама Татарстанда, Семберҙә лә (Мелекасово) бар.

XIII-XIV быуаттарҙа уҡ ҡошсолар юғары дәрәжә биләгән булған. Ҡарабах, Харясан ханлыҡтарында (шейх) Саид Али Ҡошсо, Мөхәммәт Ҡошсо идара иткән. Ә Олегбек заманында Сәмәрҡәнд обсерваторияһында Али Ҡошсо тигән ғалим эшләгән. Ә. Вәлиди «Башҡорттарҙың тарихы» исемле хеҙмәтендә «хандарҙың таянысы булған «Карачи» исемле ҡәбиләләрҙән ҡунрат, найман, самжор, манготтар бөтөнләйгә киткән, ә ҡалған айырым «төмәндәр»ҙе тәшкил иткән мең, ҡошсо, ҡыпсаҡтар, урындағы аймаҡтар менән ҡушылып, башҡорт милләте формалашыуында ҡатнашҡан», тип белдерә. Ғалимдар уларҙы ҡыпсаҡ берләшмәһендә ҙур ҡәүем булыуын билдәләһә лә, шәжәрәләре һаҡланмаған. Шулай ҙа 1865 йылғы карталарҙа Красноуфимск, Әртә райондары ерҙәре ҡошсолар биләмәләре итеп күрһәтелгән. Һөләймән ауылы шәжәрәһендә, ҡошсолар биләмәләре Туҡтамыш ханға буйһонған, үҙҙәре Майҡы бейҙән таралған, тиелә.

Нәҫел-нәсәп быуындары 14-15 быуынға тура килә. Пугачев яуынан һуң ҡошсолар ултырған ауылдар урыҫтар ауылы булып китә. 1787 йылдан Таҙтүбә — Тастүбәгә, 1802 йылдан Ярасты ауылы — Ярославкаға, Хиуа — Вознесенскиға әйләнә. Был ауылдарҙан ҡыуылған башҡорт ғаиләләре Мәләкәҫ, Ләмәҙтамаҡ, Әбдрәхим (1705), Мәрйәмғол-ҡотош (1746), Йонос (1750) һәм башҡа 30-ҙан ашыу төрлө ауылдарға килеп һыйынған. Свердловск өлкәһенән күскән ун дүрт ауылдың һәм Мәсетле районындағы Абдулла, Әжекәй, Ҡорғат, Ҡыҙылбай ауылдарындағы башҡорттарҙың татарҙар менән аралашып йәшәүе һәм балаларын татар телендә уҡытыуы һөҙөмтәһендә әле татарлашыу процесы бара. Ҡорғат ауылының бер аймағы Ғәйнәләр ырыуынан булһа ла, бер саҡ улар ҙа ҡошсолар булып киткән, ә хәҙер башҡортлоҡтарын юғалтып, татарлашыуға дусар ителгән. Ә Салйот (Салигут) ауылы үҙенең

Ҡатай берләшмәһенә ҡараған боронғо аймаҡ булыуы менән билдәле. Ваҡыт үтеү менән бындағы ҡатайҙар, ҡошсо ырыуы менән аралашып, Ҡошсо олосы ҡарамағында ҡалған. Әйле ырыуынан булған тимерәктәр ҙә, ҡошсолар менән аралашып, үҙаллы әйлеләр булыуын юғалтҡан. Тайыш, Борғатья ауылдарында ҡалмаҡ, Ҡотош ауылында үҫәргәндәр, һабанаҡ, Борғатья ауылында ҡырғыҙ аймағы, Дыуан, Ҡошсо ауылдарында Ҡолсоҡай аймағы булыуы ла билдәле. Табындарҙағы һымаҡ, ҡошсоларҙа ла этник яҡтан бер-береһе менән нык бәйләнгән ҡошсо, һунарсы, балыҡсы һымаҡ нәҫел-аймаҡтары бар. Ҡошсолар Әй буйындағы Һабанаҡ, Ләмәҙтамаҡ, Ҡотош, Һалйоғот, Ҡыҙылбай, Ҡорғат, Әжекәй, Мәләкәҫ, Борғатья ауылдарына нигеҙ һалған. Был ауылдарҙың күптәрендә төлкө, ҡуян, мәтәй, туғыҙ, буранғол нәҫелдәре бар. Ҡуян, көсөк, бесәй, бүре, төлкө, һыйыр, быҙау, кәзә, тәкә, айғыръял, ҡарға, һайыҫҡан һымаҡ хайуанҡош исемдәре менән аймаҡ-нәҫелдәр генә түгел, ауылдар ҙа йөрөтөлгән. Мәҫәлән, бик боронғо ырыуҙан булған һыҙғы һәм өпәйҙәр йәшәгән Теләш, Ишәле ауылдарынан йыраҡ түгел Тәкә ауылы әле лә шулай атала, дөрөҫ, хәҙер урыҫса «Такино» тиҙәр. Ә һәр ауылдың икенсе атама исеме, уларҙың элекке исемдәре булырға тейеш. Мәҫәлән, Йосоп ауылын – Шүрәле, Һалйоғотто – Ҡарға, Әпшәнде – Һайыҫҡан, Һөләймәнде – Һыйыр, Дүшәмбикәне – Быҙау, Тайышты – Кәзә, Һабанаҡты – Эт (Көсөк), Әбдрәхимде Зәким тиҙәр.

Хайуан, ҡош, тәбиғәт күренештәре исемдәрен нәҫелдәргә, ауылдарға ғына түгел, яңы тыуған балаға ла биргәндәр. Элек кенә түгел, хатта әле лә Айһылыу, Айсыуаҡ, Таңатар, Көнһылыу, Көнбикә, Айҙар, Ҡолдәүләт, Һарыса, Буранбай, Томансы һымаҡ исемдәрҙе осратабыҙ. Күрәһең, кеше тәбиғәткә бик нык бәйле булған, шуға ла ул ҡояшҡа һәм башҡа тәбиғәт күренештәренә табынған. Ҡояш, ай, ер, һыу, тереклек, йәй, көҙ, ҡыш, яҙ һымаҡ йыл миҙгелдәренең дә, ҡар-ямғыр, болот, йәшен, ағас, таш, тау-урман һымаҡ бөтә нәмәнең дә эйәһе – үҙ аллаһы бар. Ошо бөтә ваҡ аллалар менән, шул ваҡытта кеше менән дә ҙур хужа — күктәге Тәңре — Хоҙай, Алла идара итә, тип уйлаусы кешеләрҙе, йәки Тәңрегә табыныусыларҙы мәжүсиҙәр тиҙәр.

## Әйле ырыу-аймаҡтар халҡының урынлашыуы

Башҡорттар күсмә тормош менән йәшәүҙән ултыраҡлыҡ тормошҡа күскән ваҡытта бер нәҫел кешеләре төньяҡ, көнбайыш елдәренән ышыҡларлыҡ тауҙар ҡуйынында, йылға буйҙарына барып урынлашҡан.Шул уҡ ваҡытта һәр кеше үҙе эргәһендә балаларына ла йорт һалырлыҡ иркенерәк урындарҙы ҡарап ултырған. Мәҫәлән: Дыуан-Мәсетле ауылының (Ҡаранай яғында) көньяғында – Азаматтар, Монасип-Танаҡай аймағы менән (Вәлиев Ҡәниф, Хажин Миндиәхмәт, Әхмәтйәров Рәүилдәр) аралашып ултырған. Ә ауылдың төньяғында Таҙ-Дыуан аймағы менән Ҡылысбайҙар нигеҙләнгән.

Ләмәҙтамаҡ ауылында ла һәр аймаҡтың тирәһендә яңынан йорт һалырлыҡ мөмкинлектәре бар. Аҡайҙар төньяҡ-көнбайышҡа, туғыҙ аймағы көнбайышҡа, мәтәй аймағы халҡы төньяҡҡа, бер аҙы көнсығыш яҡҡа ла йорт һала ала. Шул уҡ аҡай, мәтәй, туғыҙ аймаҡтары Мәләкәҫтә лә йәшәй.

Ҡыйғы районы Аллагуҙ ауылының көнсығыш яртыһында Ҡабыловтар ҡолсоҡайҙар, көнбайыш яртыһында Алтынбайҙар өпәй, ҡолсоҡайҙар аймағы менән аралашып ултырған. Ә ауылдың көньяҡ-көнсығышында,Ҡатҡанды йылғаһының һул ярында Күсәмештәр, Ташбулаттар урынлашҡан.

Ҡолсоҡайҙар, Алтынбайҙар аймағы Ҡабылдан 15 саҡырым төньяҡ-көнсығышта ятҡан Түбәнге Үтәш ауылында ла бар. Бер төрлө аймаҡтан торған ауылдар араһында ҡыҙ бирешеү булмаһа ла, нәҫелдәре төрлө булғандар араһында ҡыҙ алыу-биреү борондан килгән. Ләмәҙтамаҡ, Ҡотош, Арый, Мәсетле, Ҡабыл халҡы Лағыр, Тайыш, Аҡҡын, Мишәр менән, Яуыш, Хәлил, Һабанаҡ яҡтары менән ҡыҙ алып, үҙҙәре ҡыҙҙарын биреп, ҡоҙа-ҡоҙағый булып йәшәгән. Ҡыҙ алырға тип ижабҡа килгән кейәүҙең аталары ҡыҙ атаһына ат, һыйыр, аҡсалата, баса тун һ.б. күлмәклек, камзул, яулыҡтарҙан башҡа туй үткәреү өсөн бер ҡаҙаҡ сәй, шәкәр, ит тә бирергә һөйләшкән һәм килтергән, ә ҡыҙ артынан биҙрәләре, көйәнтәһенән башлап һандыҡ тулы йорт әйбере, ҡыҙҙары тәнәйҙәренә, ҡайнағаеңгәләренә, борондаҡ инәһенә лә бүләктәр, балаларға ығырмауҙар алып барырға тейеш булған.

Туйҙы бөтә нәҫелдәре менән үткәреү өсөн дуғаға-дуға һөйләшеп, туғыҙар, һуңғараҡ бишәр-дүртәр пар ағай-энеләре ҡыҙ йортонда өс-дүрт кис, кейәү йортонда бишәр тәүлек ҡунаҡ булған, йәки һәр көн ике-өс өйҙә ҡымыҙ, буҙа, бал менән һыйланырға тейеш булғандар. Был «ғазап»ты күтәрә алмай үлеп ҡайтҡандары ла етәрлек булған.

Һуңғы йылдарҙа ҡыҙ алыу-биреү бер ауыл, аймаҡ эсендә булһа ла, туғанлығы ете быуындан сығыу шарт булып торған.

## Әйле ырыуы халҡы тамғалары

Һәр ырыу, аймаҡ, хатта айырым ғаиләләрҙең дә үҙенә генә хас булған үҙ тамғалары (инәүе), ораны, ағасы, ҡошо булған. 1955 йылда Йосоп ауылында йәшәгән Мөхөтдин бабайҙың һөйләүе буйынса, әйлеләрҙең ҡошо – аҡҡош, ағасы – тирәк, ораны – салауат. Ырыуҙар араһында ер, һыу, урман өсөн бәхәстәр булдырмау маҡсаты менән сиктәрҙең билдәле урындарында маяҡтар ултыртҡандар, ә ул маяҡтар аҫтына ерҙе ҡаҙып һәр ауыл, аймаҡ халҡы ағасташҡа үҙ тамғаларын эшләп һалған. Хәҙер ҙә ауылдарҙа көтөүҙә йәш малдар, йылғакүлдәрҙә ҡаҙ-өйрәк яңылышмаһын, береһенең бәпкәләре икенсеһенең ҡаҙҙары төркөмөнә ҡушылһа-нитһә бәхәсләшмәҫлек булһын өсөн, һәр ғаилә үҙенә генә хас булған тамғаһын-билдәһен һала. Быҙау, һарыҡ, кәзәнең ҡолаҡтарын (мөгөҙҙәренә лә һалалар), ҡаҙ-өйрәктәрҙең тәпәй япраҡтарын бер, ике, өс таяҡ, йәки буйға, арҡырыға телеү, өсмөйөш, түңәрәк тараҡ, таған һымаҡ киҫеү менән билдәләйҙәр.

Элегерәк май айы урталарында ауылдан йәйләүҙәргә киткән ваҡытта тауыҡ, күркә һымаҡ йорт ҡоштары һәр кемдең үҙе йортонда, ә ҡаҙ-өйрәктәре һыу буйҙарында ҡала торған булған.

1958 йылда Балаҡатай районы Айғыръял ауылынан 65 йәшлек Мәхмүзә апай: «Минең ҡәртнәйем, йәйҙәрен йәйләүҙә йәшәгән ваҡытта, ете-һигеҙ көнгә бер тапҡыр ауылға ҡайтып күнәк-күнәк тауыҡкүркә йомоторҡаларын йыйып алып китәбеҙ, ә ҡаҙ-өйрәктәребеҙҙе көҙөн ауылға ҡайтҡас тәпәйҙәренә һалынған тамғалары-инәүҙәре буйынса күл-йылға буйҙарынан эҙләп алабыҙ ҙа һимертеп һуябыҙ, тип һөйләй торғайны», – тип хәтерләй.

Ә беҙҙең төбәкте өйрәнеүселәрҙең береһе булған И. И. Лепехин: «Йәйләүгә күскәндә халыҡтың ҡаҙ-тауығын үҙ ҡарамағына ҡалдырыуы бөркөт-карсығаны эйәләштереү өсөндөр», – тип уйлаһа ла, үҙе үк Балаҡатай башҡорттары тормошон өйрәнгәндән һуң: «Улар тәбиғи һунарсылар. Һунарға ҡошто өйрәтеү өсөн башта йыртҡыс ҡоштоң ояһын эҙләп табырға, уны өйрәнергә, һуңынан йомортҡанан яңы ғына сыҡҡан ҡош балаһын ояһынан алырға кәрәк. Ә уны бөтә кеше лә ала алмай. Сөнки оҙон һәм бик ныҡлы арҡандар ярҙамында ғына, теп-текә ҡаяға менеп, инә ҡош балаларына ем алырға осҡан арала ғына, ҡош балаһын алып йәшеренеп өлгөрөргә кәрәк. Әгәр ҡоштар килеп етеп, һинең үҙеңде суҡып, өҙгөләп бөтөрөп ҡаянан ырғытмаһалар, йылдар буйына осорға, ит ашарға, һунарға нисек йөрөргә өйрәтәләр. Бынан һуң инде был ҡош менән ҡуян, төлкө генә түгел, бүрегә лә һунарға йөрөйҙәр», – тип яҙҙы.

Табын берләшмәһендәге алты ҡәбиләнең иң ҙуры – Табын ҡәбиләһе, тигәйнек. Табындарҙың ағасы – ҡарағас, ҡошо – ҡарағош булһа ла, ораны – әйлеләрҙеке һымаҡ – салауат (ғәрәпсә доға, маҡтау йыры, тигән һүҙ). Табындарҙың иң ныҡ таралған тамғалары – сүмес – , – түңгәләк, – ҡабырға, – һәнәк, – ҡапҡа, – ҡаҙаяҡ, – сүкеш булһа, әйлеләргә ингән мәсетлеләрҙә лә шул уҡ һәнәк, ҡаҙаяҡ, – айтамға, – дағa, 8 – һигеҙле, – әүернә, – ике ҡабырға, – уҡ-йәйә, – тараҡ, Бурансыла-Манабтарҙа түңгәләк, һағымбайҙарҙа – сүмес, ә аллагүҙҙәрҙә – бизмән, ҡошсоларҙа – – өсаяҡ, өпәйҙәрҙә – ырғаҡ, көҙөйҙәрҙә – тырма, балаҡатайҙарҙа – балға, – кәләп, – дағa, – тырма, – сәкүшкә, һыҙғыларҙа – өҙәңге, ҡаратаулыларҙа таған. Дөйөм алғанда, Рәсәй Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты Р.Г. Кузеев: «Ҡатайҙарҙың 155, ә Әйле башҡорттарының 215 тамғаһы булыуы билдәле», – ти.

Б.э. V-VII быуаттарында (552-745 йй.) бөгөнгө Монголия, Алтай, Үҙәк Азия, Төньяҡ Ҡытай һәм Урта Азия, Кавказ региондары ерендә Төрки Ҡағанаты империяһы йәшәгән. Ҡағанаттың ҡағандары – императорҙары хөрмәтенә эшләнгән кәшәнәләрҙәге (мавзолей) таштарға боронғо төрки руна (тамға) яҙыуы менән ырып яҙғандар. Был яҙыуҙарҙың эҙҙәре Монголияның Орхон, Селенга йылғалары буйында, Тува менән Хакасиялағы Йәнәсәй (Енисей) йылғаһы үҙәнендә, Алтайҙа, Урта Азияла, Кавказда, Волга буйҙарында, Башҡортостанда, хатта Венгрияла ла табылды. Беренсе булып Орхон-Йәнәсәй үҙәнендә табылғанлыҡтан Орхон-Й әнәсәй рун яҙыуы, йәки боронғо төрки рун ҡомартҡылары яҙыуы тип йөрөтөлә. Был яҙыу беренсе тапҡыр 1893 йылдың 3 декабрендә уҡылды.

1926 йылда ғалим Сәғит Мирасов: «Кешеләрҙең тәүге мәҙәниәте» (тел, һан, тамға, яҙыу һәм әлифбалар тыуыуы) исемле китабында: «Руна яҙыуы тип аталған тамғалар менән яҙыу Төньяҡ Европала германинглиз-саксондарҙа, боронғо ғәрәптәрҙә, Көнбайыш Азия, хатта Американың төп-

ерле халыҡтарында ла ҡулланылған. Б. э. V-VIII быуаттарында Орхон-Йәнәсәй яҙыуы төрки яҙыуы булып хеҙмәт иткән», – тип яҙа. Был боронғо төрки алфавитында 37 хәреф булһа, уның 17-һе башҡорт тамғаларына тап килә. Иң мөһиме, С. Мирасов донъялағы күпселек тел ғалимдарының был Орхон яҙыуын төрки халыҡтарының үҙ алфавиты икәнлеген таныуҙарын әйтә. Ә Санкт-Петербург профессоры С.Г. Кляшторный, VI быуатҡа саҡлы был руна яҙмалары турһында дәлилдәр юҡ, VII быуатта дәүләт тарафынан камиллаштырылған, реформалаштырылған руни ҡомартҡы ғына билдәле, ти.

Ысынында, кешелек донъяһына күптәнән билдәле булыуынса, кеше йәшәй башлаған та, тәүтормош кешеһенең йәшәгән урынына яҡын ерҙәрҙә аулау өсөн йәнлектәре, йыйып ашау өсөн емеш-еләктәре аҙая барған. Үҙҙәренә йәшәү өсөн кәрәк аҙыҡ-түлек эҙләп ситкәрәк китергә, һуңынан үҙ төйәгенә кире ҡайта ла белергә, күргән-белгәндәрен икенсе быуындарға – балаларына белдерергә-күрһәтергә лә кәрәк булған. Шулай, тормошта кәрәк булыуҙан, берәмләп шартлы тамғалар уйлап тапҡандар, план (карталар) һыҙырға өйрәнгәндәр. Башта ҡомға, ҡаты ергә, тиреләргә, ағасҡа, туҙға, ташҡа һыҙып, һуңынан ташты ла ырып яҙырға өйрәнгәндәр. Ваҡыт үтеү менән тамғалары ла күбәйә, белемдәре лә күтәрелә барған. Шулай боронғо халыҡтың боронДАН уҡ үҙ тамғалары – үҙ яҙыуҙары ла барлыҡҡа килгән...

Бынан 1-2 быуат элек һуғылған, сигелгән таҫтамал, ашъяулыҡ, алъяпҡыс, янсыҡтарҙың да орнаменты, һүрәттәре лә төрлө тамғаларҙы хәтерләтә. Ә былар барыһы ла, башҡа төрки халыҡтары менән бергә беҙҙең – башҡорттоң теле лә, яҙмаһы ла беҙҙең эраға тиклемге ваҡытта уҡ барлыҡҡа килеүе һәм үҫешеүе тураһында һөйләй. Руни яҙмаларында сағылған төрки теле менән башҡорт теле араһындағы ҙур оҡшашлыҡтың булыуын академик Әҙһәм Рәхимович Таничев та билдәләй.

Орхон-Йәнәсәй яҙыуын өйрәнеүгә Ҡыйғы районы Аллагүҙ ауылындағы Алтынбайҙар нәҫеле кешеһе, арабыҙҙан бик иртә киткән Мөхәммәтхәй Әхмәт улы Әхмәтов ҙур өлөш индерҙе. «Орхон-Йәнәсәй яҙма ҡомартҡыларының телендә ҡылым» тигән темаға яҡлаған диссертацияһында ул: «Башҡорт теле менән руни телендәге ҡылымдың ҡулланышы араһында оҡшашлыҡ 95 процент тәшкил итә», – тине. Диссертацияһын яҡлағас та, 1970-1995 йылдарҙа ул БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетында студенттарға лекциялар уҡыны. Шул арала 60-тан артыҡ ғилми хеҙмәте донъя күрҙе. Х.С. Фәритов, Х.А. Толомбаевтар менән урта мәктәптең VI класы өсөн башҡорт теле дәреслеге, шулай уҡ үҙе генә дидактик материалдар, күп методик күрһәтмәләр әҙерләне.

Ғәрәп алфавиты беҙҙә 1928 йылда латин алфавитына күскәнгә тиклем ҡулланылды. 1940 йылда латин алфавиты урыҫ алфавитына күсерелде. Урыҫ алфавитына күскәндән һуңғы осор башҡорт мәҙәниәтенең, бигерәк тә китап баҫыуҙың иң ныҡ үҫкән осоро, хәҙер элекке ғәрәп, латин графикаһында яҙылған әҙәбиәттең күбеһе ҡайтанан урыҫ алфавитында баҫтырылды. Хатта мәҙәниәтебеҙҙең бөйөк ҡомартҡыһы булған һәм ислам диненең нигеҙен тәшкил иткән Ҡөрьән Кәрим дә! Ә уны ғәрәп теленән башҡорт теленә Балаҡатай районы Монас (Айҙаҡай) ауылынан тарих фәндәре кандидаты мәрхүм Фәнил Нәфиҡ улы Байышев тәржемә итте, йәки баҫманың фәнни һәм дөйөм мөхәррире булды. Китапты баҫтырып сығарыуҙа Нурмөхәмәт Әлебай улы Сөйәрғолов (транскрипция эшләүсе) һәм Дәүләткирәй Дәүләтбай улы Мәһәҙиев (башҡортсаға тәржемәнең махсус мөхәррире) менән бергә эшләне. Тәржемә авторҙары (Фәнил Байышев үлгәндән һуң) БР Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына дайыҡ булды.

## ҠУЛЛАНЫЛҒАН СЫҒАНАҠТАР ҺӘМ ХЕҘМӘТТӘР


1. Руденко С.И. Башкиры. Историко-этнографические очерки. Москва, 1955.
2. Кузеев Р.Г. Очерки исторической этнографии башкир. Уфа, 1987.
3. Матюшин Т.Д. Археологические рукописи по р. Юрюзани. Уфа, 1972.
4. Янғужин Р.З. Башҡорт ҡәбиләләре тарихынан. Өфө, 1995 һәм 1998 йй.
5. Галлямов С.А. Эпосу «Урал батыр» 4 тысячи лет. «Шонкар», №6, 1995.
6. Ахметов М.М. Глагол в языке Орхоно-Енисейских памятников. Изд. Саратовского университета, 1978.
7. Шитова С.Н. Традиционные поселения и жилище башкир.
8. Мажитов Н.А. Тайны древнего Урала. Уфа, 1972, 1964.
9. Усманов Х.Ф. История Башкортостана с древнейших времен до 60-х годов XIV в. Уфа, 1995.
10. Акманов И.Г. История Башкортостана с древнейших времен до XVI в. Уфа, 1994.
11. Акад. наук СССР. Русско-башкирский словарь. Москва. 1964.
12. Лепехин И.И. Путевые заметки по провинциям России. Москва.